Муниципальное бюджетное общеобразовательное учреждение
«Башкирская гимназия № 25» городского округа город Салават
Республики Башкортостан

УТВЕРЖДАЮ
Директор МБОУ БГ № 25 г.Салавата
_______________ Г.Ш. Давлеткулова
Приказ от «29» августа 2019 г. № 323

РАБОЧАЯ ПРОГРАММА
по учебному предмету «Родной (башкирский) язык и литература»
уровень образования: основное общее
срок реализации: 2 года
количество часов в неделю: 10 кл.- 2 ч., 11 кл. – 2ч.

Программа составлена на основе «Примерные программы основного общего образования. Башкирский язык (5-9). Габитова З.М. – Уфа: «Китап», 2017г., «Примерные образовательные программы по предмету "Башкирская литература" для 5-11 классов общеобразовательных организаций с родным (башкирским) языком обучения. Юльмухаметов М.Б. –Уфа: «Китап», 2017.
УМК: Башкирский язык. Учебное пособие для 10-11 классов общеобразовательных организаций с родным (башкирским) языком обучения (на башкирском языке). Псянчин В.Ш., Псянчин Ю.В. – Уфа: «Китап», 2018; Башкирская литература. Учебное пособие для 10 класса средней школы. Хусаинов Г.Б., Гималова М.Г., Р.З.Шакуров.– Уфа, Китап, 2018. Современная башкирская литература. Учебное пособие для 11 класса средней школы. Хусаинов Г.Б., Баимов Р.Н. – Уфа, Китап, 2018.

Авторы-составители: МО учителей башкирского языка и литературы

СОГЛАСОВАНО
Протокол заседания МО
учителей башкирского языка и литературы
от « 28» августа 2019г. №1

СОГЛАСОВАНО
Заместитель директора по УВР
_______________ Д.Ш. Исламгулова
« 29 » августа 2019 г.

Салават
2019

## I. 10 -11-СЕ КЛАСС УҠЫУСЫЛАРЫНЫҢ БЕЛЕМ КИМӘЛЕНӘ ТАЛАПТАР.

Башҡорт телен өйрәнеү буйынса уҡыусылар белергә тейеш:

- йәмғиәт тормошонда телдең роле, туған телдең әһәмиәте, башҡа донъя телдәре араһында тотҡан урыны, йәмғиәт үҫешендәре роле, ижтимағи әһәмиәтен аңлы ҡабул итеү;
- ябай, ҡушма һөйләм синтаксисын, стилистикаһын иркен файҙалана белеү;
- тыныш билдәләре, текст, һөйләм интонацияһы, телмәр тибын аңлы ҡабул итеү;
- һүҙбәйләнеш, ябай, ҡушма һөйләм, тура телмәр, диалог, айырымланыу күренештәре менән эш итә белеү;
- бөтә төр анализдар:фонетик, лексик, морфологик, һүҙьяһалыш, синтаксик, стилистик анализдарҙы үтәү;
- орфоэпия, графика, орфография ҡағиҙәләре;
- текст һәм уның эсендәге һөйләмдәр, уларҙың стилдәре;
- телмәр төрҙәре (типтары) буйынса анализдар;
- һүрәтләү сараларын текстан таба белергә һәм ҡулланырға, башҡорт теленең һүҙлек байлығын белергә тейеш.

Башҡорт әҙәбиәтен өйрәнеү буйынса уҡыусылар белергә тейеш:

- өйрәнелгән әҫәрҙәрҙең авторын, исемен, исемдәрҙең мәғәнәһен;
- өйрәнелгән әҫәрҙәрҙәге ваҡиғаларҙы (сюжетты, геройҙарҙы, геройҙар менән ваҡиғаларҙың үҙ ара бәйләнешен);
- өйрәнелгән әҫәрҙең төп темаһын композицияһы үҙенсәлектәрен билдәләй белергә тейеш;
- боронғо әҙәби әҫәрҙәрҙең жанр үҙенсәлектәрен билдәләү, авторҙары менән ҡыҙыҡһыныу һәм әҙәби төрҙәрҙең төп билдәләрен белергә тейеш.

Уҡыусылар белергә тейеш күнекмәләр:

- дөйөм әҙәбиәттә художестволы әҙәбиәттең һүҙ сәнғәте булараҡ ауыҙ-тел ижадына, ҡулъяҙма әҙәбиәткә һәм авторҙар әҫәрҙәренә бүленешен билдәләй алырға тейеш;
- яҙыусы ижад иткән картиналарҙы, геройҙарҙы ҡылыҡһырлай, мөһим эпизодтарҙы күрһәтә телергә тейеш:
- өйрәнелгән әҫәрҙең сюжет, композиция элементтарын, идея – художество ҡиммәтен билдәләү;
- әҫәр буйынса проблемалы һорауҙарға яуап, образдарҙы ҡылыҡһырлау, тел-һүрәтләү сараларын билдәләү;

- боронғо әҙәбиәт менән яҙма әҙәбиәт әҫәрҙәрен айыра белеү;
- художестволы әҫәрҙәрҙе фәнни һәм публицистик әҫәрҙәрҙән айыра белергә тейеш;
- художестволы әҫәрҙәрҙе тасуири уҡыу, етеҙ һәм дөрөҫ уҡыу, уҡығанды һөйләү, уның буйынса план төҙөү.

Уҡыу предметын үҙләштереүҙең шәхси һәм предмет һөҙөмтәләре.

Шәхси һөҙөмтәләр:

- башҡорт телен башҡорт халҡының төп милли-мәҙәни ҡиммәте буларак аңлау, интеллектуаль, ижади һәләттәрен һәм шәхестең мораль-этик сифаттарын үҫтереүҙә башҡорт теленең роле, уның мәктәптә белем алыу процесындағы әһәмиәтен билдәләү;
- башҡорт әҙәбиәтенең эстетик ҡиммәтен аңлау;
- башҡорт әҙәбиәтенә ҡарата ихтирам, бай әҙәби мираҫыбыҙға ҡарата ҡыҙыҡһыныу һәм уның менән ғорурланыу тойғоһо тәрбиәләү;
- аралашыу процесында кәрәкле һүҙлек запасын эйә булыу һәм үҙ фекерендә иркен еткереү өсөн тейешле грамматик саралар ҙы үҙләштереү;
- үҙ телмәрендә күҙәтеү һәм уны баһалау күнекмәһен булдырыу.

Предмет һөҙөмтәләре:

- башҡорт теленең башҡорт халҡының милли теле, Башҡортостан Республикаһының дәүләт теле булыуы тураһында, тел менән халыҡ мәҙәниәтенең бәйләнештәре тураһында, кеше һәм йәмғиәт тормошондағы роле тураһында ҡараш булдырыу;
- гуманитар фәндәр системаһында башҡорт әҙәбиәтенең урынын һәм мәғарифта тулыһынса уның ролен аңлау;
- башҡорт әҙәбиәте тураһында төп фәнни нигеҙҙе үҙләштереү;
- әҙәбиәт ғилеменең төп аңлатмалары, уның төп бүлектәре; тел һәм телмәр, телмәр аралашыуы, һөйләү һәм яҙма телмәр, монолог, диалог һәм уларҙың төрҙәре; аралашыу ситуациялары, фәнни, публицистик, рәсми-эшлекле стилдәр, матур әҙәби тел;
- башҡорт әҙәби теленең төп нормаларын, һөйләү этикет нормаларын үҙләштереү;
- башҡорт теленең эстетик функцияһын таныу, матур әҙәбиәт текстарын анализлағанда телмәрҙең эстетик кимәлен баһалау.

Уҡыусыларҙың белемдәрен, белеүҙәрен (умение) һәм күнекмәләрен баһалау нормалары.

Телдән биргән яуаптарҙы билдәләү нормалары:

Үтелгәндәрҙе ҡабатлау, уҡыусыларҙан яуап алыу, уларҙың башҡорт теле буйынса белемдәрен һәм күнекмәләрен тикшереү, иҫәпкә алыу, шуның менән бергә, алған белемдәргә таянып, тел берәмектәренә, күренештәренә аңлатма бирергә өйрәтеү алымдарының береһе иҫәпләнә.

Уҡыусының яуабын баһалағанда, түбәндәге критерийҙар менән эш ителергә тейеш:

- яуаптың тулы һәм дөрөҫ булыуы;
- үтелгәнде аңлы үҙләштереү, аңлау кимәле;
- яуаптың телмәр төҙөлөшө, әҙәби тел нормаларына ярашлы булыуы.

Уҡыусының  телдән биргән яуабы үтелгән материалдың уҡытыусы тәҡдим иткән өлөшөнә логик эҙмә-эҙлекле аңлатманы эсенә алған бәйләнешле телмәр булырға, яуап биреүсе баланың өйрәнелгән ҡағиҙәләргә, билдәләмәләргә таянып эш итә белеүен күрһәтергә тейеш.

Әгәр уҡыусы:

- тәҡдим ителгән теманы тулы аңлатһа, тел төшөнсәләренә дөрөҫ билдәләмә бирһә;
- үтелгән материалды тулы аңлауын, белемдәрен практик ҡуллана белеүен күрһәтһә;
- материалды эҙмә-эҙлекле һәм әҙәби тел нормаларына ярашлы аңлатһа, уның яуабы «5» билдәһе менән баһалана.

Әгәр уҡыусы «5» билдәһен ҡуйыу талаптарына ярашлы яуап бирһә, ләкин һирәк яһала торған хаталар ебәреп тә уҡытыусы иҫкәртеүенән һуң уларҙы төҙәтеп барһа, телендә, телмәр төҙөлөшөндә һирәк-һаяҡ яңылышлыҡтар китһә, уның яуабы «4» билдәһе менән баһалана.

Әгәр уҡыусы тәҡдим ителгән темаға ҡараған төп төшөнсәләрҙе аңлауын һәм белеүен күрһәтһә, ләкин

- материалды тулы аңлата алмаһа, төшөнсәләрҙең һәм ҡағиҙәләрҙең билдәләмәһендә  хаталар ебәрһә;
- әйткән фекерҙәрен тулы һәм иҫбатлауҙы нигеҙләй белмәһә, үҙ миҫалдарын килтерә алмаһа;
- яуабында эҙмә-эҙлелек  һаҡланмаһа, телмәр төҙөлөшөндә хаталар булһа, уның яуабы «3» билдәһе менән баһалана.

Әгәр уҡыусы һоралған материалдың күберәк өлөшөн белмәүен,билдаләмәләрҙе һәм ҡағиҙәләрҙе әйткәндә уларҙың төп фекерен боҙоуға килтерә торған хаталар ебәрһә, материалды икеләнеүҙәр менән системаһыҙ аңлатһа, уның яуабы «2» билдәһе менән баһалана.

Диктанттарҙы баһалау.

Уҡытыусы башта тексты уҡып сыға. Өйрәнелмәгән орфограммалы һүҙҙәр алдан уҡ таҡтала яҙылған булырға тейеш. Уҡытыусы синыфтың әҙерлегенә ҡарап, әйтеп яҙҙырыу темпын үҙе билдәләй. Тексты орфоэпия, әҙәби тел нормаларына ярашлы уҡыу талап ителә.

Диктант яҙылып бөткәс, уҡыусыларға тексты уҡып һәм тикшереп сығыу рөхсәт ителә. Ләкин диктантты баштан уҡ уйлап, аңлап, иғтибарлы яҙырға өйрәтергә һәм һуңғы тикшертеү менән мауыҡмаҫҡа кәрәк. Уҡытыусы тексты икенсе тапҡыр тулы килеш уҡып сыҡҡас та, грамматик эш тәҡдим ителергә тейеш.

Контроль диктантты тикшергәндә, түбәндәге хаталар төҙәтелә, ләкин баһалағанда иҫәпкә алынмай:

- мәктәп программаһына индерелмәгән ҡағиҙәгә яҙылыштар;
- әле үтелмәгән ҡағиҙәгә яһалған хаталар;
- автор ҡуйған ҡатмарлы пунктуацияға хаталар;
- механик рәүештә бер хәреф урынына икенсеһен яҙыу (мәҫәлән: *ата* урынына *аша).*

Диктантҡа билдә ҡуйғанда шулай уҡ хаталарҙың характерына иғтибар итергә кәрәк. Хаталарҙы иҫәпләгәндә тупаҫ булмағандары, йәғни грамоталылыҡты билдәләү өсөн әһәмиәте юҡтары, айырым билдәләнә. Бындай хаталарҙың икеһе берәүгә иҫәпләнә.

Түбәндәге хаталар тупаҫ булмаған хаталарға инә:

- ҡағиҙәләрҙең иҫкәрмәләренә ҡараған хаталар;
- бәйләү юлы менән яһалған ҡушма яңғыҙлыҡ атамаларҙа ҙур хәрефтең яҙылышына хаталар;
- бер тыныш билдәһе урынына икенсеһен ҡуйыу;
- үҙләштерелгән һүҙҙәрҙең ялғауҙары яҙылышына хаталар.

Диктант бер генә билдә менән баһалана.

«5» билдәһе — тупаҫ булмаған 1 орфографик, 2 пунктуацион хата булған эшкә,

«4» билдәһе 4 орфографик, 3 пунктуацион йә 1 орфографик, 6 пунктуацион, йә орфографик хатаһыҙ, 7 пунктуацион хатаһы булған диктантҡа ҡуйыла. Әгәр хаталар араһында бер типтағылар булһа, 5 орфографик хаталы эшкә лә «4» билдәһе ҡуйырға мөмкин.

«3» билдәһе 6 орфографик, 6 пунктуацион йә 3 орфографик, 9 пунктуацион, йә 12 пунктуацион хаталы эшкә ҡуйыла. Әгәр эштә өс бер типтағы хата ебәрелһә, 8 орфографик, 8 пунктуацион хаталы эшкә лә «3» билдәһе ҡуйырға мөмкин.

«2» билдәһе 9 орфографик, 9 пунктуацион йә 8 орфографик, 10 пунктуацион хатаһы булған диктантҡа ҡуйыла. Хаталар һаны 15 орфографик хатанан да артып китһә, «1» билдәһе ҡуйыу уҡытыусы ҡарамағында.

Әгәр контроль диктанттан һуң өҫтәмә грамматик, орфографик, лексик эштәр тәҡдим ителһә, уларҙың һәр береһе айырым баһалана.

Грамматик биремдәрҙе баһалағанда түбәндәгеләрҙе иҫәпкә алыу тәҡдим ителә:

«5» билдәһе бөтә эште лә теүәл йә бер хата булғанда,

«4» билдәһе эштең яртыһынан күберәге дөрөҫ эшләнгәндә,

«3» билдәһе яртыһынан әҙерәге дөрөҫ эшләнгәндә,

«2» билдәһе бер эш тә дөрөҫ эшләнмәгәндә ҡуйыла.

Иншаларҙы һәм изложениеларҙы баһалау.

Инша һәм изложениелар яҙҙырыу аша уҡыусыларҙың:

- теманы аса белеүе,тел сараларын инша йәки изложениеның темаһына һәм уларҙағы төп фекерҙе аңлатыу бурыстарына ярашлы һайлай белеүе;

- яҙғанда, грамматик нормаларҙа һәм дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләренә таянып эш итеүе тикшерелә. Шуның өсөн иншаға ла, изложениеға ла һәр ваҡыт ике билдә ҡуйыла. Беренсе билдә менән уларҙың йөкмәткеһе һәм телмар төҙөлөшө, икенсе билдә менән грамоталылыҡ кимәле баһалана.

Баһаларҙың төп критерийҙары:

- яҙма эштең йөкмәткеһе тулыһынса темаға тура килһә, фактик хата булмаһа, йөкмәтке эҙмә- эҙлекле бирелһә (план буйынса йәки планһыҙ), эш лексик яҡтан бай булыуы менән айырылып торһа, эш темаға һәм төп фекерҙе аңлатыу маҡсатына ярашлы стилдә яҙылһа, телмәре тасуири булһа, яҙма эштә 1 орфографик йә 1 пунктуацион, йәки 1 грамматик хата (тимәк, бөтәһе 1 генә хата булһа, «5» билдәһе ҡуйыла.

- эштең йөкмәткеһе, темаға тура килһә, йөкмәтке дөрөҫ бирелһә, әммә эштә аҙ ғына хата булһа, төп фекерҙе аңлатыу эҙмә-эҙлелегендә тупаҫ етешһеҙлектәр генә булһа, яҙма эштә, синонимик, грамматик формаларға бай булһа, эш бер төрлө стилдә яҙылһа, тасуири яҡтан айырылып торһа, яҙма эштә 2 орфографик һәм 2 пунктуацион хата, йәки 1 орфографик һәм 3 пунктуацион хата ебәрелһә, «4» билдәһе ҡуйыла.

- яҙма эштә теманы ситкә китеүгә ҡараған етди хаталар булһа, төп фекер дөрөҫ аңлатылһа, әммә эштә фактик хаталар булһа, айырым өлөштәрендә төп фекерҙе аңлатҡанда эҙмә-эҙлелек боҙолһа, яҙма эш бер төрлөрәк типтағы синтаксик конструкцияларҙан торһа, һүҙлеге ярлы, һүҙҙәрҙә хаталар булһа, яңы теманы асыуҙы талап иткән стилдә 4 орфографик һәм 4 пунктуацион хата йәки 3 орфографик, 5 пунктуацион хата йәки 7 пунктуацион хата һәм орфографик хатаһыҙ булһа, «3» билдәһе ҡуйыла.

- яҙма эш темаға тура килмәһә, фактик хаталар күп булһа, эштең бөтә өлөштәрендә фекер аңлатыу эҙмә-эҙлелеге боҙолһа, текст өлөштәрендә бәйләнеш булмаһа, һүҙлек ярлы булһа, эш бер стилдә яҙылмаһа, орфографик хаталары 7, пунктуацион - 7, грамматик хата - 7-нән артһа, «2» билдәһе ҡуйыла.

Башҡорт теленән йомғаҡлау контроль диктанты.

**10-сы класс.**

Ҡаһарманлыҡты данлаусы ҡобайыр.

«Аҡбуҙат» - башҡорт эпосының алтын фондына ингән героик ҡобайырҙарҙың береһе. Башҡорт халҡының һоҡланғыс хыялы, һәләте менән быуаттар төпкөлөндә ижад ителгән был ҡобайыр бөгөнгө көндә лә, телдән телгә күсеп, быуандан быуанға тапшырылып, боронғоларҙан ҡалған амана булып йәшәүен дауам итә. Уны ижад итеүҙә һәм беҙҙең көндәргә тиклем һаҡлап килеүҙә сәсәндәр мөһим роль уйнағандар.

Һүҙҙәрҙең ҙур оҫталыҡ менән, тәрән аһәңлелек менән замандың иң алдынғы идеалдарын алға һөрөүе, кеше көсөнөң тәбиғәт көстәренән өҫтөнлөгөн, ғәҙеллектең тантана итеүен раҫлауы, илһөйәрлеккә өйрәтеүе, башҡорттарҙың тормош - көнкүреш, йолаларын сағылдырыуы уның популяр булыуына киң юл асҡан. Эпик ижад өсөн ижтимағи әһәмиәтендәге темаларҙы күтәреү, халыҡ тормошондағы мөһим ваҡиғаларҙы, образдарҙы һүрәтләүҙә уға масштаблылыҡ, күп планлылыҡ хас.

Сәсәндәрҙең ҡобайырсылыҡ традицияһында башҡорт халҡының поэтик тарихын монументаль эпопеяларҙа һүрәтләүгә ынтылыу тенденцияһы булған. Улар, төп герой быуындарының билдәле бер эҙмә - эҙлелеген һаҡлап, айырым циклдан торған ҡобайырҙар ижад иткәндәр. Мәҫәлән, Урал батыр, уның улдары һәм ейәндәре хаҡында «Урал батыр», «Иҙел менән Яйыҡ, «Аҡбуҙат» ҡобайырҙары барлыҡҡа килгән. *(М. Сәғитов.)*

**11-се класс.**

Төрлө дуҫтар була.

Һәр кемдең дуҫтары була һәм төрлө дуҫтары була: һүҙ күтәреүселәре һәм юҡҡа ҡыҙрасланыусылары ла; ҡолон муйынына аҫҡан ҡыңғырау һымаҡ шалтырауыҡтары һәм онотолғанда бер генә йылмая торғандары ла; хәтереңдә һаҡлап тормай, бәреп әйтеүселәре һәм, күңелеңдә китмәҫ өсөн, гел комплименттар ғына һибеүселәре лә; һинең менән утҡа-һыуға инерлектәре һәм, һин батҡанда, яр башында, башын ҡырын һалып, ҡарап торғандары ла; һинең өсөн иң ғәзиз нәмәһе - йәнен бирерлектәре һәм, үҙенә кәрәк саҡта, йәнеңде тартып алырлыҡтары ла, һинең шатлығыңды үҙ шатлығы, һинең уңыштарҙы үҙ уңышы итеп һөйөнөүселәре һәм, эстән генә әрнеп, көйөнөүселәре лә була.

Төрлө дуҫтар була донъяла. Ләкин уларҙың күбеһен башыңа ҡайғы төшкәндә генә аңлайһың икән.

Ҡапыл, аяҙ көндө йәшен һуҡҡан кеүек, йөрәк сире мине аяҡтан йыҡты. Дуҫтарымдың күбеһе быны белмәне, ә ҡайһы берәүҙәре белмәмешкә һалышып, урамдың икенсе яғына янтайҙы. Күптән күрешмәгән дуҫым, ялын, Ҡара диңгеҙ буйын ташлап, яныма осоп ҡайтты. Аҙнаға яҡын карауатым эргәһенән китмәне. Юҡ, йәлләмәне ул мине. «Бөгөлмә. Бөгөлгәнде тағы ла нығыраҡ бөгәләр, ә аҙаҡ һындыралар», - тине ул һәм икенсе көндө осоп та китте.

Башҡа ваҡытта, күңел күгем ҡояшлы саҡта, йөрәгем тыныс һәм талғын типкәндә, эштәрем алға киткәндә, ул ана шулай юғала ла ҡуя. Төрлө дуҫтар була донъяла… *(И. Абдуллин*

Башҡорт әҙәбиәтенән йомғаҡлау контроль эше (тест).

**10-сы класс.**

1. I донъя һуғышында ҡатнашҡан яҙыусы һәм уның романы.
2. З.Вәлидиҙең псевдонимы. Ул ҡайҙан алынған?
3. З.Вәлиди Рәсәйҙә йәшәгәндә ниндәй мәҙрәсәлә уҡыткан?
4. З.Вәлиди Әхмәт ибн Фаҙлан яҙмаларын ҡасан, ҡайҙа тапҡан?
5. «Хәтирәләр»ҙең жанры.
6. М.Буранғоловтың сәхнәгә ҡуйылған тәүге драмаһы.
7. Туй йолаларын сағылдырған драма.
8. 1944 йылда М.Буранғоловҡа ниндәй юғары исем бирелә?
9. Д.Юлтыйҙың «Ҡарағол» һәм М.Буранғоловтың тәүге драмаларын ниндәй режиссер сәхнәләштергән?

Һ. Дәүләтшинаның тормошо һәм ижад юлы буйынса тест һорауҙары.

1. Һ. Дәүләтшина нисәнсе йылда тыуған?

А) 1903 йыл Б)1905 йыл В) 1908 йыл Г) 1954 йыл

2. « Ырғыҙ» романы нисәнсе йылда баҫылып сыға?

А) 1954 йыл Б) 1967 йыл В) 1957 йыл Г) 1955 йыл

4. «Һылыуҡай- пионерка» әҫәре ниндәй гәзиттә тәүге тапҡыр баҫылып сыға?

А) «Октябрь» журналы Б) «Башҡортостан йәштәре» гәзите В) Айырым китап булып баҫылып сыға. Г) «Әҙәби Башҡортостан» журналы

5. Ҡотлояр, Юлдыбай, Рәйсә яҙыусының ниндәй әҫәре геройҙары?

А) «Башаҡ тулҡындары» Б) «Ырғыҙ» В) «Айбикә» Г) «Ялҡынлы йылдар»

6. Һ. Дәүләтшина ниндәй ҡалала үлә?

А) Бөрө Б) Өфө В) Силәбе өлкәһендә Г) Үрге ҡыйғы ауылында

7. Һ. Дәүләтшина үлгәс, «Ырғыҙ» романын басып сығарыу өсөн кем әҙерләй?

А) А. Таһиров Б) Р. Ниғмәти В) Д. Юлтый Г.) З. Сафин

8. Һ. Дәүләтшина нисәнсе йылда үлә?

А) 1905 йыл Б) 1954 йыл В) 1955 йыл Г) 1950 йыл

9. Һ. Дәүләтшинаның тәүге хикәйәһе . . .

А) «Айбикә» Б) «Партизан» В) «Башаҡтар тулҡыны» Г) «Һылыуҡай- пионерка»

10. 1967 йылда «Ырғыҙ» романы өсөн ниндәй премия бирелде?

А) С. Юлаев исемендәге премия Б) Ш. Бабич исемендәге йәштәр премияһы В) Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы.

**11-се класс.**

1. Яҙыусы тыуған ер (тура килтереп яҙ)

1. М. Кәрим А. Салауат р-ны, Арҡауылауылы;
2. Р. Ғарипов Б. Ишембай р-ны, Ҡолғона ауылы;
3. Р. Бикбаев В. Шишмә р-ны, Келәш ауылы;
4. Н. Мусин Г. Мәләүез р-ны, Арыҫлан ауылы;
5. Д. Бүләков Д. Ырымбур өлкәһе, Үрге Ҡунаҡбай ауылы.

2. Түбәндәге образдар М. Кәримдең ниндәй әҫәрҙәренән.

1. Лирик герой, Яҡуп, ҡатын. А. ”Ай тотолған төндә”;
2. Әсғәт, Талип, Аҡйондоҙ. Б.”Оҙон-оҙаҡ бала саҡ”;
3. Аҡйегет, Зөбәржәт, Шәфәҡ, Дәрүиш, Ялсығол. В. “Ҡара һыуҙар”.

3. Рәми Ғариповҡа үҙе үлгәндән һуң республикабыҙҙың ниндәй премияһы бирелде?

А) Аҡмулла исемендәге премия; Б) Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы; В) Зәйнәб Биишева исемендәге премия.

4. Һүҙ кем тураһында бара?

Уның “Ҡуштирәк” тигән бәләкәй романы, бигерәк тә “Һауыр ҡумта”, “Думбыра сыңы” “Өйөрмә”, “Ҡош юлы”, “Каруан” исемле тарихи романдары әҙәби тәнҡит һәм китап уҡыусылар тарафынан йылы ҡабул ителде. Күпселек проза әҫәрҙәре рус, ҡаҙаҡ, үзбәк телдәренә тәржемә ителгән.

А. Д. Бүләков; Б. Ә. Хәкимов; В. Р. Солтангәрев.

5. Был һүҙҙәрҙе кем әйткән?

Әҙәби тәнҡит – минең ижад эшемдең бары бер тармағы. Икенсеһе – әҙәбиәт ғилеме. Асылда, төп профессиям минең – әҙәбиәт белгесе. Әлбиттә, был ике ижад төрө араһында оло айырма юҡ. Улар, - әгәр шулай сағыштырырға яраһа, икеһе бер йөккә егелгән аттар. Әҙәбиәт ғилеме төпкө ат икән, тәнҡит осҡо ат, мисәү.

А. Ғ. Хөсәйенов; Б. Ә. Хәкимов; В. М. Кәрим.

6. “Ун өсөнсө председатель” драмаһының авторы.

А. М. Кәрим; Б. Р. Бикбаев; В. А. Абдуллин.

7. Р.Солтангәрәев ниндәй әҫәре өсөн 1978 йылда Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһына лайыҡ булды?

А. «Йылы ямғыр» һәм «Нефтселәр юлынан» әҫәрҙәре өсөн; Б. «Ҡиәмәтлек кейәү» әҫәре өсөн; В. «Осто бөркөт» әҫәре өсөн.

8. Д. Бүләковтың тәүге хикәйәләр йыйынтығы нисек атала?

А. “Ҡояш ярсығы”; Б. “Ауылымдың аҡ өйҙәре”; В. “Һары һандуғас балаһы”.

9. Тәбиғәт һәм кеше, урмандар яҙмышы тураһында яҙыусы:

А) Ноғман Мусин; Б) Мостай Кәрим; В) Һәҙиә Дәүләтшина

10. «Башҡортостандың халыҡ шағиры» исеме тәүге тапҡыр кемгә бирелгән:

А) Рәми Ғарипов; Б) Рауил Бикбаев; В) Мәжит Ғафури.

## II. УҠЫТЫУ ПРЕДМЕТЫНЫҢ ЙӨКМӘТКЕҺЕ.

### 10-СЫ КЛАСС.

| № | Бүлек | Бүлектең йөкмәткеһе | Сәғәт һаны |
|---|---|---|---|
| 1 | Башҡорт совет әҙәбиәтенең формалашыуы. Д.Юлтый ижады. Лексика. | Яңы әҙәбиәттең барлыҡҡа килеүенең социаль- тарихи ерлеге. Октябрь революцияһы һәм граждандар һуғышы йылдарында башҡорт совет поэзияһының тыуыуы. Дауыт Юлтыйҙың тормошо һәм ижады. Шиғырҙары, поэмалары. «Ҡарағол» драмаһы. «Ҡан» романы. | 8 |
| 2 | Ә. Вәлиди Туған. Фонетика. | Ә. Вәлиди Туғандың тормошо. Дәүләт һәм ғилми эшмәкәрлеге. Башҡорт тарихы, этнографияһы буйынса ғилми хеҙмәттәре. Төрки халыҡтары тарихы буйынса китаптары. Ә. Вәлиди Туған – мемуарист. «Хәтирәләр» китабы. Телмәр үҫтереү «Һин халҡыңа ҡайттың». | 5 |
| 3 | М. Буранғол. Һүҙьяһалыш. | М. Буранғолдоң тормош юлы. Башҡорт фольклорын йыйыуы. Сәсәнлек ижады. М. Буранғол –драматург. «Башҡорт туйы» драмаһы.Пьесала башҡорт туй йолаһының һүрәтләнеше, жанр үҙенсәлектәре. | 7 |
| 4 | Ғ.Хәйри ижады. Утыҙынсы йылдар әҙәбиәте. Үҙ аллы һүҙ төркөмдәре. | Ғ.Хәйриҙең тормошо һәм ижады. «Боролош» романы. Утыҙынсы йылдар әҙәбиәте. Поэзия. Проза, драматургия. | 5 |
| 5 | Һ. Дәүләтшина. Сифат. | Һ.Дәүләтшинаның тормош юлы. Ижадының башланғыс осоро. «Ырғыҙ» романы. Романда башҡорт халҡының тормош-көнкүрешенең сағылышы. Образдар системаһы. Телмәр үҫтереү. Һәҙиә Дәүләтшинаның тормош һәм ижад ҡаһарманлығы. | 8 |
| 6 | Ғ.Сәләм. Алмаш. | Ғ.Сәләмдең тормош һәм ижад юлы. «Бала» поэмаһы. | 4 |
| 7 | Р.Ниғмәти. Ҡылымдарҙың лексик-семантик | Р.Ниғмәтиҙең тормошо һәм ижады. 30-сы йылдарҙағы поэзияһы Бөйөк Ватан һуғышы йылдарындағы ижады. Поэмалары. «Һаҡмар ҡыҙы» | 4 |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | төркөмдәре. | поэмаһы. Поэманың художество үҙенсәлектәре. | |
| 8 | Б.Бикбай. Һөйкәлеш категорияһы. | Б.Бикбайҙың тормошо һәм ижады. «Салауат» драмаһы. «Ҡарлуғас» драмаһы. «Аҡсәскә» повесы. | 6 |
| 9 | З.Биишева.<br>Ҡылым төркөмсәләре. | З.Биишеваның тормошо һәм ижад юлы. Драмалары. «Тылсымлы ҡурай» драматик поэмаһы.З.Биишеваның проза әҫәрҙәре. «Сәйер кеше», «Уйҙар, уйҙар», «Ҡайҙа һин, Гөлниса».<br>«Яҡтыға» трилогияһы. | 9 |
| 10 | Һуғыштан һуңғы осор әҙәбиәте.<br>Н.Нәжми ижады. | Һуғыштан һуңғы осор әҙәбиәте. Поэзия, проза, драматургия.<br>Н.Нәжмиҙең тормош юлы һәм ижады. Баллада һәм поэмалары. «Урал» поэмаһы. Унының патриотик рухы. Ҡурайсы образы. «Шағир һәм шаһ» поэмаһы. Ижад азатлығы мәсьәләһе. Талант һәм власть проблемаһы. Драма әҫәрҙәре. Н.Нәжми ижадының башҡорт поэзияһын үҫтереүҙәге әһәмиәте. | 5 |
| 11 | Үтелгәндәрҙе ҡабатлау | | 4 |

11-СЕ КЛАСС.

| № | Бүлек | Бүлектең йөкмәткеһе | Сәғәт һаны |
|---|---|---|---|
| 1 | Мостай Кәрим .<br>Ябай һөйләм синтаксисы. | Мостай Кәримдең биографияһы һәм йәмәғәт эшмәкәрлеге. Бөйөк Ватан һуғышы йылдарындағы ижады. Фәлсәфәүи шиғырҙарында тормош, яҙмыш тураһында уйланыуҙары. “Оҙон-оҙаҡ бала саҡ” повесында әҙәп-әхлаҡ проблемаһының ҡуйылышы. Трагедияларында азатлыҡ өсөн көрәш идеяһының сағылышы.<br>Ябай һөйләм. Һөйләмдәрҙең әйтелеү маҡсаты буйынса төрҙәре. Синтаксик бәйләнештең төрҙәре. Теҙмә һәм эйәртеүле бәйләнеш, уларҙы барлыҡҡа килтереүсе саралар. | 12 |
| 2 | Рәми Ғарипов.<br>Һөйләмдең баш һәм эйәрсән киҫәктәре. | Р.Ғариповтың биографияһы һәм ижады. Тыуған ил, халыҡ яҙмышы, ил улдары тураһында уйланыуҙары. Шәхес культы йылдарында ил, халыҡ, милли интелигенцияның эҙәрлекләнеүе фажиғәһен күрһәтелеүе. Донъя һәм мөхәббәт темалары.<br>Һөйләмдең баш киҫәктәре. Эйә, уның бирелеше. Хәбәр, уның эйә тураһында нимә булһа ла хәбәр итеүе һәм эйә менән бәйләнеп килеүе. Һөйләмдең эйәрсән киҫәктәре. Уларҙың баш киҫәкте асыҡлап, уға эйәреп килеүе. | 7 |
| 3 | Әхиәр Хәким .<br>Ике һәм бер составлы һөйләмдәр. | Ә.Хәкимдең биографияһы һәм йәмәғәт эшмәкәрлеге. “Өйөрмә” романында утыҙынсы йылдар фажиғәһе. Тоталитар режимдың сағылышы.<br>Ике һәм бер составлы һөйләмдәр. Бер составлы һөйләмдәрҙең төрҙәре: билдәле эйәле, билдәһеҙ эйәле, эйәһеҙ, атама һөйләмдәр. Тулы һәм кәм һөйләмдәр. Өндәш һүҙҙәр һәм улар эргәһендә тыныш билдәләре. Инеш һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр һәм һөйләмдәр. Һөйләмдең айырымланған эйәрсән киҫәктәре. | 5 |
| 4 | Ғайса Хөсәйенов. | Әҙиптең биографияһы һәм йәмәғәт эшмәкәрлеге. Парсаларында тормош тураһында | 10 |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | | уйланыуҙары. “Рудасы Исмәғил Тасим улы” тарихи-документаль повесының идея-тематик йөкмәткеһен анализлау. “Ҡанлы илле биш” - тарихи тематикалы роман. | |
| 5 | Рауил Бикбаев. | Тормош юлы һәм фәнни эшмәкәрлеге. “Ғүмер уртаһы” шиғырында халыҡ, тыуған ил, ғүмер тураһындағы уйҙары. “ҺыуҺаным - һыуҙар бирегеҙ!” поэмаһында социаль, иҡтисади, экологик һәм мораль- этик проблемаларҙың ҡуйылышы. “Халҡыма хат” шиғырында туған тел яҙмышының бирелеше. | 6 |
| 6 | Ноғман Мусин.<br>Ҡушма һөйләм. | Яҙыусының биографияһы һәм ижады. “Мәңгелек урман” романында сағылдырылған тарихи осор. Романдың художество эшләнеше, композицияһы.<br>“Шайтан ҡуласаһы” повесында ғаилә, мөхәббәт бала тәрбиәләү, әҙәп, әхлаҡ проблемалары.<br>Ҡушма һөйләм. Теҙмә ҡушма һөйләмдәр, уларҙың төркөмсәләре. Эйәртеүле ҡушма һөйләмдәр, уларҙың төрҙәре. Ҡатмарлы синтаксик төҙөлмәләр. | 10 |
| 7 | Азат Абдуллин | А. Абдуллин тормошо һәм ижады. “Ун өсөнсө председатель”. Драманың идея-тематик йөкмәткеһе. “Һуңғы уҙаман”. Күп эйәрсәнле ушма һөйләмдәр. | 5 |
| 8 | Рәшит Солтангәрәев.<br>Тыныш билдәләре. | Яҙыусының тормошо һәм ижады. “Хамбал” хикәйәһендә Бөйөк Ватан һуғышы килтергән аслыҡ һәм ауыр тормоштоң һүрәтләнеүе. “Ҡиәмәтлек кейәү” хикәйәһенең художество үҙенсәлеге.<br>Синтаксис һәм тыныш билдәләренең ҡуйылышын ҡабатлау. | 5 |
| 9 | Динис Бүләков.<br>Тура һәм ситләтелгән телмәр. | Яҙыусының тормошо һәм ижады. “Килмешәк” романының идея-тематик йөкмәткеһе. “Ғүмер бер генә” романында заман темаһы һәм экология, ғаилә, мөхәббәт мәсьәләләре.<br>Тура һәм ситләтелгән телмәр. Тыныш билдәләренең ҡуйылышы. | 5 |
| 10 | Хәсән Назар.<br>Үтелгәндәрҙе ҡабатлау. | Хәсән Назарҙың тормошо һәм ижады. “Шәмсыраҡ “поэмаһында лирик герой. Поэманың композицион, поэтик үҙенсәлектәре.<br>Үткәндәрҙе дөйөмләштереп ҡабатлау. | 4 |

III. ТЕМАТИК ПЛАНЛАШТЫРЫУ

10-СЫ КЛАСС

| № | Дәрес темаһы | Дәрестәр һаны |
|---|---|---|
| 1 | Башҡорт совет әҙәбиәтенең формалашыуы. Д.Юлтый ижады. Лексика. | 8 |
| 2 | Ә. Вәлиди Туған. Фонетика. | 5 |
| 3 | М. Буранғолов. Һүҙьяһалыш. | 7 |
| 4 | Ғ.Хәйри ижады. Утыҙынсы йылдар әҙәбиәте. Үҙ аллы һүҙ төркөмдәре | 5 |
| 5 | Һ. Дәүләтшина. Сифат. | 8 |
| 6 | Ғ.Сәләм. Алмаш. | 4 |
| 7 | Р.Ниғмәти. Ҡылымдарҙың лексик-семантик төркөмдәре. | 4 |
| 8 | Б.Бикбай. Һөйкәлеш категорияһы. | 6 |
| 9 | З.Биишева. . Ҡылым төркөмсәләре. | 9 |
| 10 | Һуғыштан һуңғы осор әҙәбиәте. Н.Нәжми ижады. | 5 |
| 11 | Үтелгәндәрҙе ҡабатлау | 4 |
| | Бөтәһе: | 68 |

11-СЕ КЛАСС

| № | Дәрес темаһы | Дәрестәр һаны |
|---|---|---|
| 1 | Мостай Кәрим . Ябай һөйләм синтаксисы. | 12 |
| 2 | Рәми Ғарипов. Һөйләмдең баш һәм эйәрсән киҫәктәре. | 7 |
| 3 | Әхиәр Хәким . Ике һәм бер составлы һөйләмдәр. | 5 |
| 4 | Ғайса Хөсәйенов. | 10 |
| 5 | Рауил Бикбаев. | 6 |
| 6 | Ноғман Мусин. Ҡушма һөйләм. | 10 |
| 7 | Азат Абдуллин | 5 |
| 8 | Рәшит Солтангәрәев. Тыныш билдәләре. | 5 |
| 9 | Динис Бүләков. Тура һәм ситләтелгән телмәр. | 5 |
| 10 | Хәсән Назар. Үтелгәндәрҙе ҡабатлау. | 4 |
| | Бөтәһе: | 68 |